ТАРИХ БИТЕ

1990 йылдың 11 октябрендә республикабыҙҙың Юғары Советы дәүләт мөстәкиллеге тураһында Декларация ҡабул итте. 1992 йылдан был датаны беҙ, Башҡортостан республикаһы көнө буларак, билдә-ләйбеҙ. Ләкин уға тиклем үк республикабыҙ хәтерҙән юйылмаҫ бик күп тарихи ваҡиғалар кисерҙе: 1917 йылдың 15 октябрендә 1 Башҡорт ҡоролтайы тарафынан һайланған Башҡорт Үҙәк шураһы Ырымбур, Өфө, Пермь, Һамар губерналарындағы башҡорт биләмәләрен Рәсәй республикаһының автоном өлөшө, тип иғлан итә. 1917 йылдың 8 декабрендә үткән III Бөтөн башҡорт ҡоролтайы Шураның ҡарарын раҫлай. Шул тантаналы ваҡиғаға арнап, бөйөк шағир, азатлыҡ йырсыһы Мөхәмәтзакир мулланың улы Шәйехзада Бабич үҙенең мәшһүр шиғырын яҙа.

ОЛУҒ ШАТЛЫҠ

(Башҡортостан мөхтәриәте иғлан ителеү һәм Каруанһарай ҡулға алыныу мөнәсәбәте илә)

Яңғырап, шаулап сыҡҡан
шатлыҡ йырын
Фәрештәләр һөйөнөп тыңлаһын.
Шатландырҙың, Тәңрем,
һибеп нурың,
Башҡортостан халыҡ донъяһын.
Ябраил мәләк, елпеп ап-аҡ ҡанат,
Осоп йөрөһөн Башҡортостанда.
Хәбәр бирһен тиеп: "Булдың азат!
Сыҡтың йәмле, гөллө бостанға".

Азат булды һәзиз Каруанһарай,
Азат булды барлыҡ ерҙәрең...
Йырлап ебәр һөйөнөп, уйнап ҡурай,
Сыҡһын тиҙерәк
шатлыҡ йырҙарың.

Теләктәрең алға килеп тора,
Азатлыҡҡа ошбу гәләмә.
Инеп тора "дәүләт", ҡунып тора,
Киләсәгең яҡты, сәләмәт...

"Бәхет ҡыҙы" матур йөҙөн асып,
Һиңә табан көлөп боролдо...
Шатлан, уйна, һикер ярһып-ярһып!
Күпме шатланһаң да урынлы...

Үләм... Ташам... Тормайым,
ашам куккә...
Үкенмәйем инде үлһәм дә...
Үкенмәйем инде тыуған йортҡа
Күкдин ҡарап көлөп торһам да...

1917-1918 й.

КӨН ХӘҘИСЕ

Кем һүҙен сәләм биреүҙән башлай, шул - Аллаһы Тәғәләгә һәм Уның Рәсүленә иң яҡын кеше.

Кем һуҡырҙы ҡырҡ аҙым ер етәкләп илтә, шуға Йәннәт уажиб (тейеш).

Нисек кенә булмаһын, һаранлыҡ тигән ауырыу - иң ауыр сир.

Берәү доғалары ҡабул булыуын һәм ҡайғылары таралыуын теләһә, ауырлыҡта йәшәүсенең хәлен еңеләйтһен.

■ Сәләмәтлек

КҮҢЕЛ ОСҠОНО

Стресс һәм төшөнкөлөк бөгөн донъяла "заман сире", тип таныла. Сир буларак, ул психологияны емерә, ләкин иң элек физиологияға йоғонто яһай. Мәҫәлән, тире ауырыуҙары, ашҡаҙан сирҙәре, юғары ҡан баҫымы, мигрень, ҡайһы бер һөйәк сирҙәре, бөйөр эшмәкәрлеге боҙолоуы, инфаркт, йөрәк һәм тамаҡ сирҙәре, аллергия, аллергик тымау һәм, әлбиттә, психик сирҙәр, наркотиктарға эйәләшеү, йоҡонсоҡлоҡ шуның эҙемтәһе. Әлеге сирҙәрҙең тәүге сығанаҡтары тап психологик проблемаларға барып тоташа.

"Аллаһ кемде тура юлдан алып барырға теләй - шуның күңелен Ислам өсөн аса, ә кемде юлдан яҙлыҡтырырға теләй - шуның күкрәген ҡыҫҡа һәм баҫа, гүйә (был кеше) күкте ҡалҡытырҙай көс түгә. Бына шулай Аллаһ иман килтермәгәндәрҙе хурлыҡлы яҙалай" ("Әнғәм", 6:125).

Ҡаты көсөргәнеш мәлендә адреналин биҙе глюкокортикоид гармонын күпләп эшләй башлай. Был гармон өҫтәмә көс бирә, шул уҡ ваҡытта организмдағы ҡалған бөтә нәмәнең дә эшмәкәрлеген туҡтатып тора. Ниндәйҙер көс етмәҫтәй ауыр хәлгә дусар ителгәндә, әлбиттә, глюкокортикоидтың әһәмиәте ҙур, ләкин тетрәнеүҙәр йыш ҡабатлана башлаһа, уға бәйле сирҙәр ҙә барлыҡҡа килә. Әйтәйек, ҡан баҫымы күтәрелә, матдәләр алмашыныуы боҙола, һимереүҙе, остеопороз, гастрит һәм ашҡаҙан сирҙәре йышая.

Аллаға ышанмаған кешеләр дин талабына буйһонмай, шуға ла хәл-ваҡиғаларҙың Хаҡ Тәғәлә тарафынан бирелгәнлеген аңламайҙар. Улар үҙҙәрен тулыһынса Уға тапшыра алмайҙар, иманға килмәйҙәр. Һөҙөмтәлә туҡтауһыҙ бошоналар, ҡайғыралар, шикләнеү, ҡурҡыу, хафаланыу улар өсөн хас күренеш. Артабан кеше психосоматик сирҙәргә бирешә башлай. Әлбиттә, артыҡ тетрәнеүҙәр дөйөм ағзанаттың ҡартайтыуын ғына тиҙләтә. Күңел тыныслығын юғалтҡан, туҡтауһыҙ көйөнгән һәм шөбһәләнгән кешелә ниндәй сәләмәтлек булһын ти инде? Һәм был кешенең тышҡы ҡиәфәтендә лә сағылыш ала.

"Миңә зикер итергә онотоусыларҙың (иҫкә алырға теләмәүселәрҙең) тормоштары ысын-ысындан ауыр буласаҡ" (Ҡөрьән "Та-һа", 20:124).

Ә хәҙер иманлы әҙәмдәргә күҙ һалайыҡ. Улар, бөтәһенән элек, психологик һәм рухи яҡтан сәләмәт, шулай булғас тетрәнеүҙәргә, өмөтһеҙлөккө һәм ҡурҡыуға бик бирешеп бармайҙар, ундайҙарҙың ағзанаты ныҡ. Хаҡ Тәғәләгә ихлас ышаныу, тулыһынса Уға тәүәккәлләү, һәр тормош һынауын "һабаҡ" тип ҡабул итеү, үҙҙәренең иманы һәм ихласлығы өсөн Раббыларының был донъяла ла, ахирәттә лә әжер менән бүләкләйәсәге һәм Хаҡ Тәғәләгә буйһоноу шатлығы менән рухланыу - диндар кешенең күңелендә һәйбәт осҡон тоҡандыра, ул ыңғай ҡараш менән йәшәй. Тап ошолар мөъминдәрҙең эске һәм тышҡы булмышында асыҡ сағыла. Ләкин был хәләт Ислам диненең асылын тәрән аңлаған һәм Ҡөрьән ҡушҡандарҙы бөтә йөрәктәре менән үтәгәндәргә генә хас. Әлбиттә, мосолмандар ҙа ауырый, улар ҙа ҡартая, был донъяла Аллаһтың ҡушыуы шулай, ләкин былар күңел сире, күңел бушлығы һөҙөмтәһенән түгел.

Хаҡ Тәғәлә Ҡөрьәндә әхлаҡтан һәм имандан алыҫ торған, тимәк, үҙҙәрен даими ҡыйын хәлгә дусар итеп йәшәгән кешеләр тураһында шулай ти: "Миңә зикер әйтеүҙән баш тартыусыларҙың тормоштары ысын-ысындан ауыр буласаҡ... (Ҡөрьән "Та-һа", 20:124).

Икенсе аятында Аллаһ шуны хәбәр итә: "Үҙенең киңлегенә ҡарамаҫтан, улар өсөн ер тар ителде, һәм уларҙың йәндәре ҡыҫылды, һәм шул саҡта улар Аллаһ эргәһенән тыш бөтән һыйыныр урын юҡлығын аңланылар... (Сура "Тәүбә", 9:118).

Стресс, тетрәнеү, ҡурҡыу һәм хафаланыу - былар бөтәһе лә Ислам ҡушҡандан, йәғни гүзәл әхлаҡтан алыҫ торған кешеләрҙең асылы. Бөгөн бөтөн донъя табиптары бер фекерҙә: кеше үҙен төшөнкөлөктән, тормоштоң көтмәгән тетрәнеүҙәренән һаҡлар өсөн тыныс, ипле булырға, эске тәртибен, ныҡлығын һаҡларға тейеш. Үҙенә ышаныс менән ҡараған, ниндәй хәлгә тарыһа ла, уны яҡшылыҡ, хәйерле ғәмәл, тип ҡабул иткән мосолман бирешмәй. Ә быға фәҡәт Ҡөрьән әмерҙәренә буйһоноп ҡына өлгәшергә мөмкин. Аллаһы Тәғәлә бөтә күңелдән иман килтергәндәрҙең йөрәгенә "ышаныс һәм тыныслыҡ хисе" һалғанын хәбәр итә". ("Баҡара", 2:248; "Тәүбә", 9:26,40; "Әл-Фәтх", 48:4,18). Аллаһтың Үҙенең ихлас, тәкүәле ҡолдарына биргән вәғәҙәһе шулай яңғырай: "Иман килтергән һәм яҡшылыҡ ҡылғандарға, ирҙәр булһынмы йәки ҡатындармы, шул хаҡ, Беҙ гүзәл тормош бүләк итәбеҙ һәм иң яҡшы эштәренә ярашлы әжерҙәрен бирәбеҙ" (Ҡөрьән, "Ән-Нәхл", 16:97).

Ата-бабаларыбыҙ яҡшы белгән, ләкин инде онотола төшкән ошо хаҡ юлды беҙгә ҡабаттан иҫкә төшөрөргә, өйрәнергә генә кәрәк. Иман һәм сәләмәтлек айырым кешенең генә түгел, ә халыҡтың дөйөм мәсьәләһе лә булып тора бит әле. Киләсәкте лә ул хәл итә. Бына шуны иҫтән сығармаһаҡ ине, йәмәғәт.

ИХСАН – ҡамиллыҡ

Мөхәмәтзакир ЮСУФОВ,
хәҙрәт

Рәсүлдең ҡатыны Фәйшә (р.ғ.) әйтеп ҡалдырыуынса, Мөхәммәд Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) шулай тигән: "Әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ күременең тәүге көнөндә "Әлхәмдулиллаһ!" тип әйтеп, шунан тәүбә итеп: "Әстәғфируллаһ!" тиһә, Аллаһы Тәғәлә уны Йәһәннәмдән ҡотолоусылар исемлегенә яҙасаҡ". Йәнә лә Аллаһы Тәғәлә уны Сират күперенән үтеүселәр һәм Йәһәннәм ғазабынан ҡотолоусылар исемлегенә яҙасаҡ. Әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ күрем көндәрендә Аллаһы Тәғәләгә зикр әйтеүселәрҙән һәм Уға шөкөр итеүселәрҙән һәм Унан тәүбә һораусыларҙан булһа, һәр көн өсөн ҡырҡ шаһиттың әжере яҙыласаҡ.

Бер көндө Рәсүлдең (с.ғ.с.) сәхәбәһе Фәли ҡатыны Фатима, йәғни Рәсүлдең (с.ғ.с.) ҡыҙы менән хәл белешергә тип киләләр. Шул саҡ Пәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) иҙәндә илап ултырғанын күрәләр. Фатима (р.ғ.) һорай: "Эй, Аллаһтың Рәсүле! Һеҙҙе нимә ул тиклем ҡайғыға һалды? Нимә өсөн күҙ йәше түгәһегеҙ?" Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) яуап бирә: "Миғраж төнөндә (күккә ашҡан төнөндә) Хаҡ Тәғәлә ун һигеҙ төрлө яза аласаҡ ун һигеҙ төркөм ҡатын-ҡыҙҙы күрһәтте. Былар минең өммәтемдән ине, шуға ла улар өсөн иланым". Фатима (р.ғ.) һорай: "Эй Аллаһтың Рәсүле, улар тураһында беҙгә лә аңлатһағысы. Ниндәй төркөм һуң улар?" Пәйғәмбәр яуап (с.ғ.с.) бирә: "Теленән аҫылған ҡатынды күрҙем. Күкрәгенән аҫылған ҡатынды ла күрҙем. Шулай уҡ - аяҡтары маңлайына бәйләнгәнде, тәнен ашаһындар өсөн, уға йыландар һәм саяндар йүнәлтелгәйне. Йәнә лә үҙ итен ашаған ҡатынды күрҙем, ә аҫтында уҫаҡ ине. Утлы ҡайсылар менән үҙ итен ҡырҡыусы ҡатынды күрҙем. Шунан миңә Аллаһы Тәғәлә тарафынан йөҙө ҡарайтылған ҡатынды күрһәтеләр, ул үҙенең мейеһен ашай ине. Унан һуҡыр, һаңғырау һәм телһеҙ ҡатынды күрҙем. Аллаһы Тәғәлә йөҙөн суҫҡаныҡына, ә кәүҙәһен ишәктекенә әйләндергәнде лә күрҙем, уға бер нисә төр яза бирелгәйне. Тағы кәүҙәһе әттекенә оҡшаған ҡатынды күрҙем. Сәсенән аҫылып ҡуйылғанды ла күрҙем...".

Быларҙы ишеткән Фатима (р.ғ.): "Эй, Аллаһтың Рәсүле! Күҙемдең нуры! Ниндәй ғәмәлдәре өсөн ҡатындар бындай язаға дусар ителгәндәр һуң?" - тип һорай.

Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) аңлата: "И Фатима! Сәсенән аҫылғаны ят ирҙәрҙән үҙенең сәсен йәшермәгән ҡатын ине. Ә теленән аҫылғаны кешеләргә теле менән насарлыҡ эшләүсе ҡатын. Әгәр ҙә ҡатын теле менән иренә эшәкелек ҡыла башлаһа, Аллаһы Тәғәлә уның телен етмеш терһәккә оҙонайтасаҡ...".

Был йәһәттән Әбүбәкирҙең әйткәндәрен иҫкә төшөрөү ҙә урынлы булыр, Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) шулай тигән: "Теле менән ирен ғазаплай башлаған ҡатын Аллаһы Тәғәләнең, фәрештәләренең һәм Уның барлыҡ мәхлүҡтәренең ҡәһәренә эләгәсәк".

Усман (р.ғ.) шулай тигән: "Әгәр ҙә ҡатын иренә: "Мин һинән бер ниндәй ҙә яҡшылыҡ күрмәнем!", тип әйтә икән, был ҡатын етмеш йыл Раббыһына ғибәҙәтлек иткән булһа ла, Аллаһы Тәғәлә уны йәшәгән ғүмере эсендәге барлыҡ сауаптарынан мәхрүм итәсәк".

Ҡатындарға бирелгән яза тураһында һөйләп, артабан Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) шулай тигән: "...күкрәгенән аҫылған ҡатын иренә әйтмәйенсә сит балаларҙы имеҙеүсе булыр. Аяғынан аҫылғаны - ире рөхсәтенән тыш өйөнән сығып йөрөүсе. Ул - шулай уҡ күрем көндәренән һуң һәм бала тапҡандан һуң, ғөсөл ҡойонмаусы. Үҙ тәнен ашағаны - сит ирҙәр өсөн биҙәнеүсе-төҙәнеүсе һәм кешеләрҙең артынан файҙаһыҙ хәбәр һөйләүсе. Утлы ҡайсы менн үҙенең тән итен ҡырҡыусы - үҙенең матур кәүҙәһе, буйһыны менән башҡалар алдында мактаныусы, тән матурлығын ирҙәргә күрһәтер өсөн айырым кейем кейеүсе. Йыландар һәм саяндар тамаҡланһын өсөн, маңлайына аяҡтары бәйләнгәндәре Ислам ҡанундарын үтәргә хәлдәре килеп тә (ураҙа, намаҙ һ.б.) уны үтәмәүселәр, күремдән һуң ғөсөл ҡойонмаусылар. Баштары сус-ҡаныҡы, кәүҙәләре ишәктекенә әйләнгәндәр - ғәйбәт һөйләүселәр, яла яғыусылар, алдаҡсылар. Ә эт кәүҙәләләр - янъял, талаш-ыҙғыш ҡуптарыусылар, ирҙәрен сығырҙарынан-сығарыусылар".

Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) әйткән: "Әгәр ҙә ҡатын иренә: "Ҡәһәр һуҡһын!" тип әйтә икән, күктең етенсе ҡатындағылар һәм Аллаһы Тәғәлә яралтҡан барыһы ла был ҡатынды ләғнәтләйәсәк".

Абдурахман бин Ауф (р.ғ.) Пәйғәмбәрҙең ошо хәҙисен тапшырған: "Сәләмәтлеге насар булыу арҡаһында тейешле аҡса таба алмаған ирҙе ҡатыны битәрләһә, кәмһетһә һәм шуның менән ирен ҡайғыға һалһа, Аллаһы Тәғәлә был ҡатындың бер генә намаҙын да, ураҙаһының бер генә көнөн дә ҡабул итмәйәсәк".

Ибн Аббас (р.ғ.) тапшырғандарҙан: "Мөхәммәд пәйғәмбәр (с.ғ.с.): "Әгәр ҙә ҡатын өйөнән иренең ризалығынан тыш сыға икән, был ҡатынды өйөнә ҡайтып еткәнгә тиклем ҡояштың нуры төшкән бар нәмә лә ҡәһәрләйәсәк", тип әйтте". Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) артабан шуларҙы ла өҫтәгән: "Ҡатын иренең рөхсәте менән биҙәнеп-төҙәнеп. Хуш еҫле майҙар һөртөнөп ҡапҡанан сыға икән, уның яһаған һәр аҙымы өсөн Аллаһы Тәғәлә иренә Йәһәннәмдән өй әҙерләй".

Бер мәл Фатима (р.ғ.) кәңәш һорап, Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) янына килә: "Эй, Аллаһтың Рәсүле, бер һүҙ арҡаһында ирем Фәли менән талаштыҡ". Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) шулай тигән: "Өйөңә ҡайт һәм ирең йылмайһын өсөн бөтәһен дә эшлә". Фатима ҡайтҡас, иренең өнһөҙ-хәрәкәтһеҙ килеш ултырғанын күрә. Йылмайһын өсөн, уны етмеш мәртәбә әйләнеп сыға. Шул саҡ Фәли йылмая ла шаяртып шулай ти: "Меҫкен ҡатын!" Фатима Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) янына йүгерә: "Эй, Аллаһтың Рәсүле, миңә ирем йылмайҙы, беҙ яраштыҡ!" Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) яуап бирә: "Йәнем өҫтөнән Хакимлыҡ итеүсе һәм мине хаҡ Рәсүл итеп ебәреүсе менән ант итәм, әгәр ҙә һин, ирең һинән риза булмаған килеш, үлеп китһәң, мин һинең өсөн йыназа намаҙы ҡылмаған булыр инем. И ҡыҙым, Аллаһы Тәғәләнең ризалығы - ирең ризалығында, Уның асыуы - ирең асыуында икәнен белмәйһеңме ни? И ҡыҙым ҡайһы ғына ҡатын-ҡыҙ Хаҡ Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылмаһын, ул Фәйса пәйғәмбәрҙең (с.а.) әсәһе изге Мәрйәмгә оҡшаш, ләкин ире унан ҡәнәғәт булмаһа, Аллаһы Тәғәлә уның бер ғибәҙәтен дә ҡабул итмәйәсәк. И ҡыҙым, ирең йыназаһына ҡатнашмаһаң, ул ҡабул итмәйәсәк. И ҡыҙым, ирең ҡайғыға һалһа, Аллаһы Тәғәлә был ҡатындың бер генә намаҙын да, ураҙаһының бер генә көнөн дә ҡабул итмәйәсәк".

Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) артабан шуларҙы ла өҫтәгән: "Ҡатын иренең рөхсәте менән биҙәнеп-төҙәнеп. Хуш еҫле майҙар һөртөнөп ҡапҡанан сыға икән, уның яһаған һәр аҙымы өсөн Аллаһы Тәғәлә иренә Йәһәннәмдән өй әҙерләй".

Бер мәл Фатима (р.ғ.) кәңәш һорап, Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) янына килә: "Эй, Аллаһтың Рәсүле, бер һүҙ арҡаһында ирем Фәли менән талаштыҡ". Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) шулай тигән: "Өйөңә ҡайт һәм ирең йылмайһын өсөн бөтәһен дә эшлә". Фатима ҡайтҡас, иренең өнһөҙ-хәрәкәтһеҙ килеш ултырғанын күрә. Йылмайһын өсөн, уны етмеш мәртәбә әйләнеп сыға. Шул саҡ Фәли йылмая ла шаяртып шулай ти: "Меҫкен ҡатын!" Фатима Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) янына йүгерә: "Эй, Аллаһтың Рәсүле, миңә ирем йылмайҙы, беҙ яраштыҡ!" Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) яуап бирә: "Йәнем өҫтөнән Хакимлыҡ итеүсе һәм мине хаҡ Рәсүл итеп ебәреүсе менән ант итәм, әгәр ҙә һин, ирең һинән риза булмаған килеш, үлеп китһәң, мин һинең өсөн йыназа намаҙы ҡылмаған булыр инем. И ҡыҙым, Аллаһы Тәғәләнең ризалығы - ирең ризалығында, Уның асыуы - ирең асыуында икәнен белмәйһеңме ни? И ҡыҙым ҡайһы ғына ҡатын-ҡыҙ Хаҡ Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылмаһын, ул Фәйса пәйғәмбәрҙең (с.а.) әсәһе изге Мәрйәмгә оҡшаш, ләкин ире унан ҡәнәғәт булмаһа, Аллаһы Тәғәлә уның бер ғибәҙәтен дә ҡабул итмәйәсәк. И ҡыҙым, ирең йыназаһына ҡатнашмаһаң, ул ҡабул итмәйәсәк. И ҡыҙым, ирең ҡайғыға һалһа, Аллаһы Тәғәлә был ҡатындың бер генә намаҙын да, ураҙаһының бер генә көнөн дә ҡабул итмәйәсәк".

Ибн Аббас (р.ғ.) тапшырғандарҙан: "Мөхәммәд пәйғәмбәр (с.ғ.с.): "Әгәр ҙә ҡатын өйөнән иренең ризалығынан тыш